❒ Билем һәм ғәмәл

Әбу ЯСИН,
Руслан МАЛИКОВ

ИСЛАМДЫҢ ҮҘ-ҮҘЕНӘ ҠУЛ ҺАЛЫУҒА ХӘКӘМӘ ПРОБЛЕМАҒА ҠАРАШ ҺӘМ ДАУАЛАУ

АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘ МЕНӘН БӘЙЛӘНЕШ ЮҠЛЫҒЫ (ДОҒА)

Хаҡ Тәғәлә ҡолдарының үҙенә доға ҡылғандарын ярата һәм уның һәр үтенесенә яуап бирә. Ҡай берәүҙәр, Аллаһы Тәғәлә минең доғамды ҡабул итмәне, тип уйлай. Уға ялбарыуҙан туҡтай. Ләкин Аллаһ - Хикмәтле, Белеүсе. Ул доғаларға төрлөсә яуап бирә, был да кеше мәнфәғәте өсөн хәйерле. Ҡай саҡ Аллаһ кешенең үтенесен был донъяла үтәй, ҡай саҡ әжер итеп, Ахирәткә ҡалдыра һәм унда күберәк-мулыраҡ бирәсәк. Ә ҡай саҡ ялбарыуына яуап итеп, уны ниндәйҙер бәлә-ҡазанан ҡоткара. Ҡайһы ғына осраҡты алһаҡ та, Аллаһы Тәғәләгә ҡылған доғабыҙ беҙгә изгелек, бәрәкәт кенә, сөнки Аллаһ беҙгә нимә кәрәк икәнен беҙҙән дә яҡшыраҡ белә, беҙгә нимә файҙалы булыуы тик Уға ғына мәғлүм. Ул әйтә:

“Бәлки яҡшылыҡ тигән нәмә һеҙгә оҡшамайҙыр, ә ул һеҙҙең өсөн файҙалы. бәлки үҙегеҙгә зарар итерҙе ныҡыраҡ яратаһығыҙҙыр. Быларҙың барыһын да Аллаһ белә, ә һеҙ белмәйһегеҙ” (Ҡөрьән, 2:216).

Шуға ҡарамаҫтан, күпселек Аллаһтың мәрхәмәтенә күнергә теләмәй, улар “үҙ яҙмыштарына үҙҙәре хужа” булғылары килә, һәм Сөбхәнә Тәғәләнең ярҙамынан баш тарталар. Улар үҙҙәрен Раббыларына можтаж түгел, тип һанайҙар. Был уларға бәхет килтермәй, гәрсә, матди байлыҡ йыйыу йәһәтенән ниндәйҙер уңышҡа ирешкән хәлдә лә. Уларҙың йәндәрендә ауыр йөк ята, сөнки Аллаһ менән бәйләнеш өҙелгән.

“Ә кем һаранлыҡта булып, (Аллаһ динен) кәрәкмәй тип, һәм иң хәйерлене ялған, тип һанаһа, Беҙ ундайҙарҙың хәтәр юлға табан барыуҙарын еңеләйтәсәкбеҙ” (Ҡөрьән, 92:8-10).

Аллаһы Тәғәләгә доға ҡылыуҙы буш ваҡыт сарыф итеү тип һанаған кешенән дә һараныраҡ кем бар һуң? Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнештә булыуҙы инҡар итеүсенән дә рәхимһеҙерәк һәм тәкәбберерәк кем бар һуң? Аллаһы Тәғәләнең әжеренән баш тартҡан, Уның аяттарын ялғанға һанаусынан да алйотораҡ кем бар һуң? Ысынлап та, бындай кешенең фани тормошо ауыр һәм хәсрәтле, ә Ҡиәмәт көнөндә ҡубарылыуы үкенесле һәм ҡайғылы булырға тейеш түгелме ни? Әгәр ҙә ул Аллаһы Тәғәләнән баш тарта икән, үҙенә ҡайғы килтерә, гонаһын арттыра, йөгән ауырайта торған юлдары ла еңел асыла барасаҡ. Кеше Аллаһы Тәғәләне онотһа, Раббыһы уның тормошон ҡатмарлаштырып ҡына ҡалмай, ә ауыр юлдан алып бара. Ул хатта кешенең үҙенә нимә файҙа килтерәсәген дә онотторa. Аллаһы Тәғәлә әйтә:

“Аллаһы Тәғәләне онотҡандарға һәм шул арҡала уларҙың үҙҙәренә лә (яҡшылыҡтың нимә икәнен) оноторға мәжбүр иткәндәргә оҡшамағыҙ. Улар боҙоҡтар ине” (Ҡөрьән, 59:195). Йәғни улар үҙ мәнфәғәттәрен онотҡандар, ә бөтә иҫләгән нәмәләре: фани донъяны туйындыра торған ҡыҫҡа ғүмерле эш-ғәмәлдәр, был йәһәттән улар хайуандарҙан бер нәмәһе менән дә айырылмайҙар.

“Шул хаҡ, Беҙ Йәһәннәм өсөн күп ендәрҙе һәм кешеләрҙе яралттыҡ. Уларҙың йөрәктәре бар, ләкин улар бер нәмә лә аңламай күҙҙәре бар, ләкин бер нәмә лә күрмәйҙәр, ҡолаҡтары бар, ләкин бер нәмә лә ишетмәйҙәр. Улар хайуан һымаҡ, ләкин тағы ла ныҡыраҡ яҙлыҡҡандар. Тап бына улар томана наҙандар...” (Ҡөрьән, 7:179).

Фәмһеҙлеҡ-бошмаусанлыҡ һәм Аллаһтың әмерҙәренә бармаҡ аша ҡарау уларҙы хайуандарҙан да түбәнерәк кимәлгә төшөрә. Әгәр ҙә йәндең үҙ Яралтыусыһы менән аралашырға булған тәбиғи ихтыяжы ҡәнәғәтләндерелмәһә, тыумыштан бирелгән ошо эске тәбиғилек, әлбиттә, әҙәм тәнендә хайуан йәне йәшәүе менән ризалашмай. Тәне үҙе үк йәндең ташлап китеүен үтенәсәк. Был донъяла артыҡлығын, кәрәкмәгәнлеген тойғн кеше үҙен юҡ итергә тырыша. Ә бит уға бары тик саф йөрәк менән Аллаһҡа ялбарырға, тәүбәгә килергә һәм хәлен еңеләйтеүен һорарға ғына кәрәк ине. Хаҡ Тәғәлә шундуҡ уның доғаһына яуап бирер, хәлен еңеләйтер яралы йәненә тыныслыҡ ебәрер ине.

“Әгәр ҙә ҡолдарым һинән Минең турала һораһалар, әйт Мин бит бик яҡынмын, һәм доға ҡылыусының үтенесенә яуап бирәм” (Ҡөрьән, 2:186).

“Кем мохтаждың доғаһына яуап бирә, яуызлыҡты юҡ итә һәм һеҙҙе ерҙә хаким итеп ҡуя, Аллаһы тәғәләгә ғибәҙәт итеүҙән дә өҫтөнөрәк тағы ла илаһ бармы әллә? Һеҙ бик аҙ уйланаһығыҙ” (Ҡөрьән, 27:62).

Кеше Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнешен өҙөргә тейеш түгел. Ҙурмы-бәләкәйме, рухимы, әллә матдимы, мөһимме, әллә ваҡтәйәкме - бөтөн үтенестәре менән Раббыһына ғына мөрәжәғәт итергә тейеш. Рәсүл (с.ғ.с.) Аллаһтың һүҙен беҙгә еткергән:

“Әй, ҡолдарым Минең! Әгәр ҙә һеҙ мин тура юлға күндергәндәрҙән тыш, аҙашҡандарҙан икән, Минән тура юл күрһәтеүҙе һорағыҙ, Мин һеҙҙе тура юлға күндерермен. Әй, ҡолдарым Минең! Һеҙ мин туйындырғандарҙан тыш, барығыҙ ҙа ас, Минән ризыҡ һорағыҙ, Мин ризыҡландырырмын. Әй, ҡолдарым Минең! Һеҙ барығыҙ ҙа Мин кейендергәндәрҙән тыш, яланғас, Мин һеҙҙе кейендерермен. Әй, ҡолдарым Минең! Һеҙ көнө дә, төнөн дә гонаһ ҡылаһығыҙ, бары тик Мин генә һеҙҙең барлыҡ гонаһтарҙы ғәфү итеүсе, Минән ярлыҡау һорағыҙ, Мин һеҙҙе ярлыҡармын”.

Аллаһы Тәғәләнең ошо һүҙҙәрен уҡығандан һуң, кемдең дә булһа, суицидҡа барыу теләге уянырмы? Был тормошто ул беҙгә ҡынау һәм иҫкә алыу өсөн биргән, шул юлдан барһын өсөн бөтәһен дә: ризығы менән дә, ҡоралы менән дә тәъмин иткән һәм барлыҡ шарттарҙы булдырған, шул юлдан алып барһын өсөн уҡытыусыларын да, Китабын да биргән. Шуға ла Беҙ сикһеҙ мәрхәмәте өсөн Аллаһы Тәғәләне маҡтарға, шөкөр итергә генә тейешбеҙ. Илауларға, ризаһыҙлыҡ белдерергә хаҡыбыҙ юҡ.

3) Аллаһы Тәғәләгә тәүәккәлләмәү һәм өмөтһеҙлөк

Аллаһы Тәғәләнең ярҙамына өмөт итмәгән, Уға тәүәккәлләмәгән йәғни тапшырылмаған, Уның ярҙамына ышанмаған һәм тәүбәгә килмәгән кешене суицидың буласаҡ ҡорбаны, тип әйтеп була.

Кеше үҙен һәрдаим күреп тороусы, ишетеүсе, уны әлеңге тормош юлынан алып барыусы Раббыһы барлығын белһә, был донъяла үҙенең яңғыҙ түгеллеген дә асыҡ тоя, сөнки уның ныҡлы терәге бар. Ҡыйынсылыҡҡа тарып, хатта кешеләр ярҙам итмәгәндә лә, ул һәр саҡ, Аллаһ сығыу юлын күрһәтер, тигән өмөт менән йәшәй. Сөнки Ул әйткән:

“Аллаһтан ҡурҡҡан кешегә Ул сығыу юлын күрһәтә, уға үҙе көтмәгән урындан ризығын бирә. Аллаһы Тәғәләгә тәүәккәлләгән кешегә Уның барлығы еткән. Аллаһ Үҙ әмерен аҙағына тиклем алып барып еткерә. Аллаһ һәр нәмә өсөн сиген һәм үлсәмен ҡуйған” (Ҡөрьән, 65: 2-3).

Аллаһы Тәғәлә өмөттәребеҙҙе фани донъяға йүнәлтмәҫкә ҡуша, сөнки фанилыҡтағы һәммәһе лә, бөгөнмө-иртәгәме юҡҡа сыға, үлә, ә Раббыбыҙ - мәңге Тере, бер ҡасан да үлмәй, ләкин терелтә һәм үлтерә. Ул изге Ҡөрьәндә әйтә:

“Бер ҡасан да үлмәйәсәк Мәңге Терегә тәүәккәлләә, һәм Уны оло маҡтау менән данла” (Ҡөрьән, 25:58).

Үҙенең өйөнөң нигеҙен ҡомдан яһаған кешенән дә һуҡырыраҡ тағы кемде табырға була? Йылғаның тәүге ташҡыны уҡ был өйҙә емерәсәк. Фани донъяға өмөт фанилыҡ менән ҡуша үләсәк. Ә инде кеше өмөтөн юғалтһа, уның урынын бушлыҡ, үкенеү һәм яңғыҙлыҡ биләп ала. Иманы һай, йәки бөтөнләй иманһыҙ булған кешеләр күбеөмөтөн өҙә?” (Ҡөрьән, 15:56).

Иман кеше йәнендәге үҙгәреп тороусанлыҡты ҡаплай, ул кеше йөрәген ауырлыҡ алдында - көслө, ҡыуаныслы хәлендә тотанаҡлы, тыйнаҡ итә. Мөъминдең йөрәге хәкиҡәттә ныҡ тора, яҙмыш елдәре уны тегеләй-былай борғослай-һелкесләй алмай. Аллаһ шулай ти:

“Шул хаҡ, бәлә килгәндә кеше түҙемһеҙ, сабырһыҙ итеп яралтылған, байлыҡ килгәндә - һаран итеп. Был ғибәҙәт итеүселәргә ҡағылмай, улар ваҡытында намаҙ уҡыйҙар, фәҡирҙәргә, меҫкендәргә малдарынан өлөш сығаралар (саҙаҡа, зәкәт), улар Ҡиәмәт көнөнә ышаналар” (Ҡөрьән, 70619-26).

Иманда булыу һәм Аллаһ әмерҙәрен үтәү кешене таҙарта, камиллаштыра, тыумыштан бирелгән етешһеҙлектәрҙән юғарыраҡ итә. Был - Аллаһы Тәғәләнең иң гүзәл аяттарының берәһе һәм мосолмандарға мәрхәмәте. Ислам кешеләрҙе Аллаһы Тәғәләгә тәүәккәлләргә өйрәтә. Уның көҙрәтен, Үҙенең ҡолдарына киң рәхмәтен иҫтә тоторға ҡуша. Был Дин кешеләргә өмөтһеҙлөккә төшөргә юл ҡуймай, ауырлыҡ, һәр төрлө ҡазалар алдында баҙап ҡалмаҫҡа өйрәтә, иманлы әҙәмдең рухын ҡеүәтләндерә, зәғифтәргә көс бирә, ҡайғыға тарығандарҙы йыуата, уларға хәсрәт килгән рәк ошондай үкенескә тарый.

Кеше психологияһы шулай, Хаҡ Тәғәлә ниғмәт менән бүләкләһә, туҡтауһыҙ тантана итәләр, күҙ-ҡолаҡтары тона, был донъяға нимә өсөн килгәндәр, ҡайҙа барғандарын да онотолар. Ә инде шатлығы ҡайғы, һынау менән алмашынһа, көйөп-бөтөрөнөп, сараһыҙлыҡҡа төшәләр. Сөнки кешенең матди донъя менән бәйләнеше шул тиклем ныҡ көслө. Шуға ҡарамаҫтан, Ислам кеше рухын инстинкттан юғарыраҡ күтәрергә ынтыла, бөйөгөрәк, файҙалыраҡ маҡсаттарға юл күрһәтә, ә улар фани донъяла ла, Ахирәттә лә һәйбәт бирә торған юлдар. Аллаһ Ҡөрьәндә Ибраһим пәйғәмбәрҙең (ғ.с.) әйткәндәрен миҫалға килтерә:

“Юлдан яҙғандарҙан тыш, кем Раббыһының шәфҡәтенән саҡта шулай ти:

“Аллаһы Тәғәләгә тәүәккәллә, Аллаһы Тәғәләнең вәли һәм һаҡлаусы булыуы еткән!” (Ҡөрьән, 33:3).

4) Сабырһыҙлыҡ

Алда әйткәнебеҙсә, фани донъя - һынау. Ә һынау ауырлыҡтарҙан тыш булмай. Әгәр ҙә кеше йәшәү мәғәнәһен тапмай икән, ауырлыҡтарҙы еңеп сығыр өсөн сабырлыҡ талап ителгәнен дә аңламай. Ул үҙе аңлағанса еңел юл эҙләгән була. Ни өсөн сабыр итергә, нөктәһен ҡуйып, фанилыҡты ҡалдырырға була бит, ти ул. Тап ошондайыраҡ фекерҙәр суицидҡа илтә лә инде. Йәшәү мәғәнәһе юҡлығы, көнитмештең маҡсатһыҙлығы кешене зәғифләндерә, ауырлыҡты еңеп сығыу теләгенән дүндерә.

Ислам кешегә йәшәйештең асыҡ картинаһын бирә. Уға маҡсат, көслө йәшәү дәрте һәм ҡатмарлыҡтарҙы йырып сығыр өсөн ынтылыш, ҡыйын саҡтарҙа үҙ-үҙен тота алырлыҡ сабырлыҡ бирә, бигерәк тә, Аллаһтың Әмерҙәрен үтәгән саҡта. Сөнки беҙҙең тормошта дини эш булһынмы, донъяуи эшме, бөтә нәмә лә сабырлыҡ талап итә. Был сифаттан тыш, бер маҡсатҡа ла өлгәшеү мөмкин түгел. Ул Ҡөрьәндә “бөйөк өлөш” тип атала. Яуызлыҡҡа изгелек менән яуап бирә алған кешеләр тураһында Хаҡ Тәғәлә шулай ти:

“Ләкин был (сифат) сабырлыҡ итә белгәндәрҙән тыш һәм бөйөк өлөш эйәләренән тыш, берәүгә лә бирелмәгән” (Ҡөрьән, 41:35).

Был турала Аллаһтың рәсүле лә (с.ғ.с.) әйткән:

“Берәүгә лә сабырлыҡтан тыш яҡшыраҡ һәм киңерәк бер нәмә лә бүләк итеп бирелмәгән”.

Фани донъя мотлаҡ һынауҙар ҡуя һәм ул, бойҙайҙы ҡыйҙан айырғандай, кешеләрҙе лә иләк аша үткәрә. Шуға ла был юлды лайыҡлы үтер өсөн кеше барлыҡ ихтыяр көсөн тупларға, ваҡытлы ауырлыҡтарға һылтанмайынса, тормошта үҙенән талап ителгән бөтөн нәмәне лә эшләргә тейеш. Аллаһы Тәғәлә әйтә:

“Беҙ мотлаҡ һеҙҙе ҙур булмаған ҡурҡыу, аслыҡ, мөлкәтте, кешеләрҙе, емеште юғалтыу менән һынаясаҡбыҙ. Сабырҙарҙы, уларға бәлә килгән саҡта: “шул хаҡ, беҙ Аллаһы Тәғәләнеке һәм Уға ҡайтарыласаҡбыҙ”, тигәндәрҙе ҡыуандыр. Улар Раббыларының рәхмәтенә һәм ниғмәтенә ирешәсәктәр. Улар тура юлдан бара” (Ҡөрьән, 2: 155-157).

Раббыбыҙҙың әмерҙәрен үтәр, һәм Ул харам иткәндәрҙән тыйылыр өсөн беҙ сабырлыҡҡа мохтажбыҙ. Йән өсөн был ауыр тойолалыр. Сөнки ул бит сикһеҙ ирек теләй һәм һәр төрлө тоткарлаусы йөктәрҙән ҡотолғоһо килә. Шулай ҙа юғары маҡсаттарға өлгәшергә ынтылғанда, йәндең емерткес сифатын ауыҙлыҡлай белергә кәрәк, ә быны сабырлыҡтан тыш эшләү мөмкин түгел. Тормоштоң һәр ауырлығы алдында ла сабырлыҡ кәрәк - бөтәһе лә Аллаһтың ҡушыуы булып тора. Ике донъялағы ла именлегебеҙ, бәрәкәтебеҙ ауырлыҡтарҙы нисек үтеүбеҙгә бәйләнгән. Хаҡ Тәғәлә әйтә:

“Бөтөн ҡайғы ла Аллаһтың ҡушыуы менән (әҙәм башына) төшә. Аллаһҡа иман килтергән кешенең йөрәген Ул тура юлға күндерә. Аллаһ бөтә нәмә тураһында ла хәбәрҙәр” (Ҡөрьән, 64:11).

Сабырлыҡ, иртәме-һуңмы, һөҙөмтәһен бирә. Ҡыйын хәлдәрҙе йырып сығырға, маҡсатҡа ирешергә ярҙам итә. Аллаһтың рәсүле лә (с.ғ.с.) әйткән:

“Бел, еңеү сабырлыҡ менән килә, йыуаныс - хәсрәт аша, ә ауырлыҡ менән ҡуша еңеллек тә килә”.

(Дауамы бар).